**5 класс. Башҡорт дәүләт теле.**
**Тема: Башҡортостан йылғалары. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр.**

**Маҡсаттар:**
1) <u>Белем биреү:</u> яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙең яҙылышын, Башҡортостан тураһындағы текстарҙың төп йөкмәткеһен үҙләштереү;
2) <u>Үҫтереү:</u> яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙең яҙылыш айырымлыҡтарын үҙләштереү, уҡыусыларҙың логик фекерләүенә иғтибар итеп, хикәйәләү-тасуирлау мөмкинлектәрен киңәйтеү;
3)<u>Тәрбиәүи:</u> Башҡортостанға һөйөү тәрбиәләү, башҡорт теле аша башҡорт халҡының тарихы, төп милләт булған башҡорт халҡының тарихына, мәҙәниәтенә ихтирам тәрбиәләү,Башҡортостан йылғалары тураһында белешмә биреү.
**Йыһызландырыу:** дәреслек, Башҡортостан картаһы, һүрәттәр, карточкалар,мультимедия проекторы.
**1.Дәрес барышы.**
Ойоштороу мәле.
Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Хәйерле көн!
Фонетик күнегеү. Дәресте башлар алдынан бер аҙ телдәрҙе лә шымартып алайыҡ.
Ҡыңғырау шылтыраны,
Беҙ йыйылдыҡ дәрескә,
Китап, дәфтәрҙәр әҙер,
Тотонабыҙ беҙ эшкә.
***2. Дәрестең темаһын асыу. Маҡсат ҡуйыу. Эште планлаштырыу.***
*Һалҡын һыулы <u>Һаҡмарҙа</u> һайрай һары һандуғас* (таҡтала яҙылған тиҙәйткесте уҡыу, тәржемә итеү, аҫтына һыҙылған һүҙҙең яҙылышын аңлатыу, лексик теманы билдәләү).
***3. Өй эшен тикшереү.* 18-се күнегеү (13 б.).** Ниндәй өй эше бирелгәйне? Был һүҙҙәр ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай? Улар ниндәй һорауҙарға яуап бирә? Кем? Нимә?
**Предметтарҙың атамаһын**
**“Исем” белдерә беҙгә.**
**Кем һәм нимә? һорауҙарын**
**Ҡуйырға кәрәк һүҙгә.**
-Эйе, Башҡортостандың йылғалары тураһында һөйләшәсәкбеҙ. Йылғалар ниндәй хәреф менән яҙыла? Баш хәреф менән.Тимәк, предметтың атамаһын белдергән яңғыҙлыҡ һүҙҙәрҙе һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе өйрәнеп китәсәкбеҙ.(Собственные и нарицательные имена)
Таҡтаға бөгөнгө датаны һәм теманы яҙып ҡуяйыҡ
Тема: Башҡортостан йылғалары. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр.
*Проблемалы һорау:*
- Башҡортостандың ниндәй йылғаларын беләһегеҙ?
**4.Төркөмдәрҙә эш:**. Һүҙҙәрҙе өс төркөмгә бүлеп яҙыу, 3 төркөмгә бүленеү: ҡала, йылға, тау исемдәре.
*Урал , Ағиҙел, Стәрле, Бөрө, Дим, Ирәндек, Һаҡмар, Инйәр, Танып, Янғантау, Салауат, Белорет, Торатау, Ҡариҙел, Ҡаратау.*
**5.Дәреслек менән эш: 29-сы күнегеү 33б.**
*А) <u>Һүҙлек эше (уҡыусылар һүҙлек дәфтәренә яҙып ала):</u>*
Саҡрым – километр,
Йәшәү тамыры – основа жизни,
Көньяҡ-көнсығыш – юго-восток,
Туҡландыра – питает,
Төньяҡ-көнбайыш – северо-запад,

Ҡоя – впадает,
Мул һыулы – полноводный.
*Хор менән әйтеү һүҙҙәрҙе, 1-2 һүҙ менән һөйләм төҙөү.*
*Б) Тексты укыу. Укытыусы башлай, укыусылар сылбыр буйынса дауам итә, тәржемә итеү.*
*В) Дәфтәрҙәргә 3 яңг. һәм 3 урт. исемдәрҙе күсереп яҙырға.*
*Г) Йөкмәткеһе өҫтөндә эш:*
*- Башҡортостанда күпме ҙур һәм бәләкәй йылғалар бар?(600)*
*- Иң оҙон йылғаны атағыҙ. Оҙонлоғо күпме?*
*- Ағиҙел йылғаһы ниндәй йылғаға ҡоя?*
*- Тәбиғәткә ниндәй ҡарашта булырға тейешбеҙ? (как должны относиться к природе?)*
*- Һеҙҙең ауыл (ҡала) янында ниндәй йылғалар аға?*

**6.Ял минуты.**

Аҡҡоштарҙай йөҙәйек,
Бөркөт кеүек осайыҡ.
Ҡуян кеүек һикерәйек,
Айыу кеүек атлайыҡ,
Болан кеүек еләйек,
Арыҫландай һуҙылайыҡ
Һәм урынға ултырайыҡ.

**7.Парҙарҙа эш:**

1 - Яңғыҙлыҡ ис-р аҫтына бер, 2 - йылғалар исеме аҫтына 2 һыҙыҡ һыҙығыҙ:
1.Кәрим, китап, сәлимә, ҡәләм, йылға.
2.Һаҡмар, гөл, әй, аҡ, урман.

**8.Дәрескә рефлексив анализ.**

-Уҡыусылар, хәҙер әйҙәгеҙ үҙебеҙҙе тикшереп ҡарайыҡ әле.

1. Ағиҙел ниндәй йылғаға ҡоя?(Кама)
2. Башҡортостанда күпмегә яҡын йылға бар? (600)
3. Тәржемә эше: мул һыулы, саҡрым.
4. Айгөл менән илназ яҡшы уҡыйҙар.

Подчеркнуть имена собств. одной чертой, нариц.- двумя..
Эштәрегеҙҙе алмашығыҙ, баһалағыҙ. Дөрөҫ яуаптар таҡтала.
Тимәк, дәрестә беҙ нимәгә өйрәндек? Бөгөн дәрестә ниҙәр белдегеҙ? Үҙегеҙгә ниндәй яңылыҡ алдығыҙ?
Йомғаҡлау: Беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙың тәбиғәте иҫ киткес матур, йылғалары мул һыулы. Тәбиғәтте һаҡларға, яҡларға бурыслыбыҙ.
Өй эше. 1. “Башҡортостан” исеменән икенсе һүҙҙәр төҙөргә, улар кем йәки нимә һорауына яуап булырға тейештәр (баш- голова, ҡорт- пчела , ос- конец, ҡор- община, шар, башҡорт- башкир, ҡаш- брови, торт, башаҡ- колосок, ҡош- птица, таш- камень, ат- лошадь).
2. “Башҡортостан” темаһына ижади эш (һүрәт, шиғыр, инша, әкиәт һ.б.)
Баһалау.

**Ҡушымталар:**

1.Тауҙарҙы ғына билдәлә/Отметьте только горы:

Урал , Ағиҙел, Стәрле, Бөрө, Дим, Ирәндек, Һаҡмар, Инйәр, Танып, Янғантау, Салауат, Белорет, Торатау,  Ҡариҙел, Ҡаратау.

Йылғаларҙы ғына билдәлә/Отметьте только реки:

Урал , Ағиҙел, Стәрле, Бөрө, Дим, Ирәндек, Һаҡмар, Инйәр, Танып, Янғантау, Салауат, Белорет, Торатау,  Ҡариҙел, Ҡаратау.

Ҡалаларҙы ғына билдәлә/Отметьте только города:

Урал , Ағиҙел, Стәрле, Бөрө, Дим, Ирәндек, Һаҡмар, Инйәр, Танып, Янғантау, Салауат, Белорет, Торатау,  Ҡариҙел, Ҡаратау.

**2. 1 – Выписать только имена собственные,  2 – выписать только реки:**
1.Китап, кәрим, сәлимә, ҡәләм, йылға.
2.Гөл, һаҡмар, әй, аҡ, урман.

*3. Һүҙлек эше (переписать в тетради, выучить):*
Саҡрым – километр,
Йәшәү тамыры – основа жизни,
Көньяҡ-көнсығыш – юго-восток,
Туҡландыра – питает,
Төньяҡ-көнбайыш – северо-запад,
Ҡоя – впадает,
Мул һыулы – полноводный.